ТИМЕР ЙОСОПОВ

# Әсә... Ҡояш... Ҡыр...

Ике ҡояшым бар ине. Ваҡыт үткән һайын тәүге ҡояшым баш осонда зыр әйләнә. Бер тауҙан ҡалҡа ла, икенселенә бара ла ултыра, хатта уның төпһөҙ ғәләмгә сумғанын да ишетәм һымаҡ. Ул көн дә үҙгәреп торамы чи. Әлегә тиклем нисәмә мең ҡояштың ҡалҡҡанын да, батҡанын күрҙем.

Көно буйы, зәңгәр йыһанды йәшен утындай сыжлатып өтә-өтә, хәтһеҙ юл үткән ҡот тубы, ҡалалағы йорттар араһына ҡыҫыла-ҡыҫыла, офоҡҡа барып төнәгәндә:

— Тағы балҡып сығырыңды күрергә яҙһын,—тим... — Көн дә үрһәләнеп шундай теләктәр теләйем.

Икенсе ҡояшым—әсәйем ине. Ул бер ҙә ҡалҡманы ла, байыманы ла. Гел уның янында уралдым. Уның яҡты нуры гел мине йылытты. Бер аҙ ғына юғалып торҙомо — гел шул ырыҫ йомғағын эҙләнем. Шул ҡот шары хәүеф менән минең арала бәләнән аралап торҙо.

Ике ҡояшымды ла тәү ҡат күргәнем хәтеремдә ҡалмаған. Был донъяға күҙем асылғас та ике ҡояшым менән осрашҡанмындыр... Тимәк, икеһенең дә яҡты нуры керпегемдә сырт-сырт килгән... Икеһенә лә йылмайып тәүге ҡат һүҙ ҡушҡанмын. Төймәләй генә ҡулымды уларға һуҙғанмын.

...Ҡайҙа барһам да, тыуған ҡырҙарым күҙ алдынан китмәй. Ҡара танда, ҡара яҙҙа баш күтәрмәй унда башаҡ сүпләгәнмен. Емле ергә юлыҡһаҡ, ат башындай алтын тапҡандай, ҡыуанғанбыҙ. Ҡыр, әсәй, ҡояш бала күңеленә һеңеп ҡалған.

Нишләптер һуғыш осоронда, унан һуңғы йылдарҙа ураҡ өҫтөндә көндәр бик эҫе ине. Башыңды ҡайҙа ҡуйырға ла белмәйһең. Тынынды ҡурып бара. Ере лә утлы табалай ҡыҙа. Ҡоштар ҙа әлһерәп ғәләм төбөнә бата һымаҡ. Өнөн-тынын сығармай.

Тиҫтерҙәремдең бала сағы ҡырҙа үтә.

Күҙ алдымда әсәйем дә, ҡырым да, ҡояшым да дөрләп янған. Әсәйем янымда, ут шары—баш осомда ғына, ҡырым—алдымда...

Бала саҡтың яҡты баҫыуҙары. Диңгеҙ кеүек тулҡындары алға — алыҫтарға, офоҡ ситенә, сайпыла. Күҙ күреме етмәҫлек киңлек, күгәреп, күкрәп ята. Болот күләгәһе, Алпамыша еләненең сабыуындай, ергә һөйрәлеп-һөйрәлеп бара ла күҙҙән юғала. Ул шәүләне тотам, тип йыш ҡына йүгереп тә ҡарағаным булды, тик етә алманым.

Әсәйем ең һыҙғанып ураҡ ура. Алтын усмаларын бер урынға һала, кәлтә бәйләй. Алды киң, барып сығасаҡ арғы башы йыраҡ, осо-ҡырыйы күренмәй.

— Ике һыуһында был алды ла осларбыҙ,— ти ҙә ул әсәйем. Ай-һай атҡарырбыҙ микән? Әйтеүе генә еңел. Хәйер, күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй, тиҙәр. Әсәйем кирелеп урғанда, ерен ҡосаҡламаҡ була шикелле. Маңғайынан сөбөр-сөбөр тире тама, уны ең осо менән һөртөп ала.

Бигерәк көн эҫе шул. Өтөп алып бара. Күктә хәҙер бер болот әҫәре юҡ. Ҡояш та, бер урынға барып төртөлгән дә, ҡуҙғалырға оноҡҡан, тик тора. Инәйҙәр иген ура. Әсәйем эргәһенән Шакира апай төшкән, унан ҡала Кәбирә еңгәйҙең алды китә. Улар иген тип уттан сығып утҡа инә. Бер яҡ ситтәрәк Рәбиға әбей ҡолас ташлай. Сикһеҙ даръяны һис тә йырып сыға алмай аҙаплана. Ялҡындан сәсәп китә, янып килә, әйтерһең дә, дөрләп тотәп килә. Таһира еңгәм дә унан ҡалышмай. Артыҡ сәбәләнмәй, бик таҫыллы, алымы ырамлы, бер ике һибелеп һелтәнеүе була, баҫыуҙы ялмап алған шикелле. Беҙҙең яҡта ундайҙар хаҡында:

— Күҙ теймәһен инде үҙенә,—тиҙәр.

Фатима апай ҙа болан кеүек талпына, бер кемде лә алдына сығармай. Фәриға, Факиһа, Мәфрүза, Рәхимә апайҙарым да һис тә бирешмәй. Яңыраҡ ҡына үҫеп буй еткергәндәр, билдәре бигерәк һыйыҡ шул, ел иҫкәндә, йәш талдай, сайҡалып китә. Ауыр көрһөнә-көрһөнә инәйҙәр уларға ҡарап:

— Бәхеттәре генә булһын инде,—тип юрайҙар. Юрауҙары юшҡа килһен.



ҒУМ[illegible] Ю[illegible] КӘРИМОВ фотоэтюды.

Баҫыу уртаһынан ат юлы үтә. Әй шул юлдан ғына елеп йылға буйына төшөп китергә. Рәхәтләнеп Әнйәктә һыу инер инек. Ҡоластарҙы ташлай-ташлай, тулҡындарын ярып үтер, һыуында сабаҡтай йөҙөр инек. Тик ҡаҙҙар ғына унда ҡаңғылдашып йөрөйҙәр.

Юл буйлап Аҙнабикә апай ал алып төшкән. Ялтлап киткән урағына ҡояш эләгә лә, игенде ялап алғанда һыпырылып ҡала, ахыры. Ашлыҡ тип ашыҡҡанда ҡатындар ни көнгә генә төшмәй: ҡанат киргән ҡошҡа әйләнә, шырлыҡты йырған боланды хәтерләтә: бер ҡараһаң, тулҡындарҙы ярып килә, икенселәй баҡһаң.

баҫыу ут өйөрмәһендәй дөрләй, инәйҙәр ялҡын һүндерә һымаҡ, текләберәк ҡараһаң, ҡоластарын йәйә-йәйә баҫыу иңенә һуғышҡа ҡарғыш яҙа төҫлө.

Сабый мәлебеҙ ҡырҙа уҙа. Беҙҙең кеүек әҙәм араһына кергәндәр, ирҙәр төҫлө нужа арбаһына егелгәндәр, усмаларҙы бергә ялғай-ялғай, бау яһап, кәлтә бәйләй. Рафаил, Йәләл, Салауат, Абдрахман ағайҙар, Юрис, Раяф, Марс, Вәрис ҡорҙаштарым да ҡырҙа әсәләренең ҡул араһына керә: ҡайһыһы бөгөлә-һығыла ураҡ урып баҫыуҙы иңләй, усмаларҙы бер урынға йыйып, кәлтә яһай. Ни хәл итһен — етем үҙ кендеген үҙе киҫә. Бер эсагә **карап тороп булмай ^а!** Әҙүәлит, Йәҙҡәр, Ғәлиәхмәт, Зөлҡәрнәй, Әнүәр, Марат ҡустыларыбыҙ аяҡ араһында уралырға ғына белә. Башҡа ҡайғылары юҡ. Ҡайһылары арып, баштарын көлтәгә терәп серем итә. Былдай янып торған баҫыуҙа бер атлауың — бер әжәл, улар көнө буйы ҡырҙа бит — йонсоп та китәлер инде. Балаларҙың яланғас тәҙҙәрен ҡамыш тетә. Күңелдәре ярым шул. һеркәләре һыу күтәрмәгән кескәйҙәр үҙ-ара сәкәләшеп тә китә. һүҙ артынан һүҙ эйәрә һуғыш та сыға. Көҙгө әтәсте хәтерләтеп, иңдәрен ҡабартып, берберенә һелтәнеп тә алалар. Шуны ғына көтөп торған шаян Салауат, Абдрахман, Йәләл, Рафаил ағайҙарға етә ҡала. Ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тығалар, китә шаушыу, китә тауыш, китә алыш. Улар, йәнәһе, кескәйҙәргә ҡеүәт бирә:

— Булмаҫ һинән, Ғәлиәхмәткә лә бирешеп тораһыңмы?

— Арыу ғына ҡуптыра. Әҙүәлитен Аҡъял батыр тиерһең.

— Миңдыханы ла бирешмәй.

— Ауыҙын бәлешәйтте, әллә иларға уйлай инде.

— Быларҙан йүнле мал сыҡмаҫ ахыры.

— Көслөһө беҙҙеке, — тип һөрән һалалар.

Сабыйҙарҙы сәмләндереп, улар бер аҙ ғына бил дә яҙҙырып алалар. Шарҡылдайҙар. Шаулайҙар. Сысҡанға — үлем, бесәйгә — көлкө. Үҙҙәренең дә күңеле күтәрелеп ҡала, ахыры. Улар шулай сабыйҙарҙы сослоҡҡа, түҙемлеккә, хәүеф алдында баҙап ҡалмаҫҡа өйрәтә. Бер кем сырайын һытмай, сер бирмәй, бер кем балауыҙ һыҡмай. Асыу йотоп түҙергә кәрәк! Егет кешеһең!

Инәйҙәрҙең баш ҡалҡытып бер-ике һүҙ әйтеүе була — малайҙар ҙа таралышып үҙ юлдарына китеп үҙ урындарын алалар. Сама белергә кәрәк — гел уйын-көлкө булмай.

һуғыш йылдарындағы әсәләр. Уларҙың утлы бер һулышы үҙе бер ғүмергә торошло. Күптәрендә итәк тулы бала. Донъяһы етеш булһа, ярай ҙа. Ирҙәренән ярҙай донъя ҡалдымы ни? Нисәмә етемдең мороно бер һыйырға терәлә. Әсәйҙәр:«һәүкәшебеҙ һау булһын, һыйлы көнөң һыйыр», —• тиҙәр. Шулай балаларын йыуаталар. Ирҙәр ҡулы ҡағылмаһас, йорт-ҡаралтыларға ла етем төҫө керҙе. «Беҙгә генә ҡалған икән ауыр заманалары», — тип юҡҡа йырламайҙар инде. Яҙмыш елдәре лә гел тиҫкәренән иҫә. Беҙҙең тыуған төйәккә лә берәй ырыҫ ҡунырмы икән? Юҡһа, үлем көҫәп, баш осонда гел ҡоҙғон һағалай.

Быйыл иген ярайһы уҡ унған. Арышы бигерәк ишелеп ята. Ҡайырып алғыһыҙ, һуғыш йылдарындағы ҡатындар. Уларҙың күңелдәре ярым-ярты. Шакира, Фатима, Аҙнабикә апайҙарҙың ирҙәре һуғыш яланында баш һалғандар. Ҡара ҡағыҙҙары килгән. Рәбиға әбей, Хөмәйрә апайҙың улдары ла яу ҡорбандары, «һуға төшкән кеүек юғалды ла ҡуйҙы», — тип илайҙар улар. Таһира еңгәйҙең улы Хәйретдин ағай һуғыштан яраланып ҡайтҡан. Фәриға, Мәфрүзә, Факиһа апайҙарымдың һөйгән йәрҙәре юҡ:

*Ҡәһәр һуғыш.*
*Һыуҙай аҡты*
*Яп-яҡты өмөттәрем,*
*Ә апайҙар япа-яңғыҙ*
*Көтә шул егеттәрен.*

Ярҙай йәрҙәре яуҙа ҡалғас, апайҙарым, еңгәйҙәрем, инәйҙәрем ергә ярҙай ишелә, уларҙың аһтары ишетелә. Етемдәр илағанда — ер ҙә, күк тә илаған төҫлө. Уларҙың йөрәгенән әрнеп сыҡҡан йырҙарҙан донъ* шаңҡыр һымаҡ. Илап, эстәре бушанып алғас, көрһөнәкөрһөнә:

— Нишләтәйек, ҡайғыны ла ил менән күтәрәбеҙ, — тип үҙ-үҙҙәрен йыуаталар. Күрәһең, еңелерәк булыг ҡалалыр.

Ғүмер буйы «күҙебеҙ асылыр», тип өмөтләнеп йәшәй торғас, сал быуаттың иң түбәһенә лә етеп киләбеҙ Таһира еңгәм, Хөмәйрә, Фәриға, Факиһа апайҙарым донъя ҡуйҙы. Яҡты көндөң тыуыуын көтә-көтә гел алданып йәшәнеләр.

Икенсе ҡояшым — әсәйем ғүмер аҙағы тигән ят һыртҡа барып байыны. Яна-яна, ҡыҙара-ҡыҙара сит тауға ышыҡланды. Икенсе ҡояшымдың шул һырттан сығырын көтәм дә көтәм, ул һаман ҡалҡмай ҙа ҡалҡмай.

Ҡыр... Әсәй... Ҡояш... Ошо өс изге зат мине кеше иткән... Аҙмы бәләләрҙән аралаған... Ҡыр... Әсәй...Ҡояш... Ҡырҙарыбыҙҙы ҡалдырғанға ла хәҙер һанһыҙ йылдар уҙран. Ғүмер тауына ҡалҡып яйлап төшөп киләбеҙ. Ашлыҡ емерелеп унды, күҙебеҙ асылып ҡалыр, тибеҙ, һаман күҙ асылмай, донъябыҙ бөтәйеп, ҡалынайып барғанда, өмөт түбәһенән тағы кире тәгәрәнек шикелле. Йәшәү кешегә бер тапҡыр бирелә. Шул аралыҡта күпме һынауҙар үттек, күпме юрәлтыуҙар, күпме еңеүҙәр, еңелеүҙәр кисерҙек. Бер ғүмер өсөн күп түгелме икән?

Ватан ни кисерһә — әсә лә шуны кисерҙе. Юҡҡа ғынамы ил Әсә һынында һүрәтләнә.

Беҙҙең яҡта әсәләр тураһында: «Күкрәге менән көл генә ташыманы инде,»— тиҙәр. Ғәләмдә күп ғазап күргәндәр хаҡында әйтәләр был әсе һүҙҙәрҙе...

Заманалар буталып, әҙәп теҙгене бушап ҡалғанда, әҙәм балаһы әсәһен йышыраҡ иҫкә төшөрһә ине.

Йылдар һырттарынан алыҫта ҡалған бала саҡ ҡырҙарына оҙаҡ ҡарап торам. Күҙҙәрем тала. Эстәремде уттар ала, күңелемдә һағыш солғай. Апайҙарым, еңгәйҙәрем, инәйҙәрем һаман да талпына-талпына иген ура һымаҡ...

Әсәләр, беҙҙең әсәләр... Донъя ауыр тип тормағандар, итәк тулы бала тапҡандар, бала баҡҡандар, ялҡында көйгәндәр, сабыйҙарҙы һөйгәндәр.

Минең атай — Йосоп, әсәйем — Мәрзиә Нуриман ҡыҙы. Уларҙың ун ике балаһы булған. Мин ун беренсе булып донъяға килгәнмен. Фәниә апайым менән мин генә тере ҡалғанбыҙ. Туғандарым сабый ғына көйө донъянан киткән, уларҙы егерме беренсе йылғы аслыҡ, ҡыҙылса, сәсәк ауырыуҙары ҡырран. Әйткәндәй, шул аслыҡтың иң асыһын беҙҙең яҡ кисергән. Йортһоҙ ауылыма ҡайтһам, Дилмөхәмәт бабайҙарҙың әүен артына барам. Унда уртаҡ кәберлек бар. Унда шул аслыҡтың ҡорбандары күмелгән. Ағайҙарым да, апайҙарым да шунда ята. Ул түбә алдында тын ғына баҫып торам. Аслығы ла, яуы ла аямағас, — башҡорттоң хәлен аңлауы ҡыйын түгел. Ут итәгенә төшкәс кенә, уның ни икәнен аңлайһың. Беҙ күргәнде — башҡалар күрмәһен. Ун икебеҙҙең икебеҙ генә именбеҙ икән — беҙҙең кеүектәр аҙ тиһеңме? Аҙмы аҫыл ирҙәрҙең башына яуҙар еткән. Ил күтәрмәҫ ҡайғылар әсәләр иңенә төшкән. Уларға түҙем бирһен.

Ҡыр... Әсә... Ҡояш... Күҙ алдымда һаман Шакира апай атлығып, тешен ҡыҫып асырғанып алдын иңләй. Ҡараһаң — ҡулына күҙ эйәрмәй. Урағында ҡояш уйнай. Шакира апайҙың кисергәндәре башынан ашҡан. Өрлөктәй Рамазан ағай яуҙа һәләк булғас, тол ҡалған. Һөйөлөп танһығы ҡанған, тиһеңме, Халыҡ шағиры Һүҙҙәре менән әйтһәк, ятҡанда ике мендәр һалған, ашағанда — ике ҡашыҡ ҡуйған. Йәрен көткән. Ул тормошта аттай егелде. Берҙән-бер улы Юристы уҡытып кеше итте.

Юрис — иң яҡын балалыҡ дуҫым. Ишәй менән Ҡушайҙай бергә үҫтек, бер телем ризыҡты ла, шатлыҡты ла, ҡайғыны ла бергә бүлештек. Бик унған булып сыҡты ул. Ҡулы алтын. Урта мәктәпте бөтөрөр ал-

дынан үҙ көсө менән тауҙай йорт һалып сыҡты. Ниндәй эшкә тотонһа да хәленән килде. Етмәһә ул Йәүһәрә тигән ике туған һеңлемә өйләнде. Башта уларҙың да тормош арбаһы келтерҙәп кенә барманы. Ауырлыҡтарҙы ла байтаҡ татығандарҙыр. Бирешмәнеләр. Оялары ла үрсемле булды: **ете бала бағып кеше иттеләр:** өлкән ҡыҙҙары Юлизә Өфөлә тора, үҙ донъяһы бар. Әлфиәһе — Мәсәғүттә тормошта. Розалиәһе — Өфө авиация техникумын тамамлап тыуған яғында эшләй, бер улдары — Санкт-Петербургта юғары хәрби училищены тамамланы, хәҙер — хеҙмәттә, икенселәре — Өфөлә медицина институтында уҡый, ҡалғандары ата-әсәләре ҡарамағында. Был ҡайтҡанда, Йәүһәрә һеңлемдең арҡаһынан тупылдатып һөйҙөм.

— Рәхмәт, ағайым. Атайым-әсәйем булмаһас, һуңғы ваҡытта бер кем дә иңемдән ҡағып яратҡаны юҡ ине, үҫеп ҡалдым, — тип көлгән була. Ә мин ҡарашымды ситкә алдым. Шатлыҡтан да, һағыштан да, күҙемдән йәш бәреп сыҡҡайны.

Ҡапылда Йәүһәрәнең ата-әсәһе күҙ алдыма килеп баҫты. Ике арала үҫкәс ни, гел күҙ терәп уларға баҡтым. Әхтәрйән бабайым — әсәйемдең бер туған ағаһы менән Ғилминиса әбейем ғүмер юлдарын бергә үттеләр. Бер-береһенә бигерәк эҫе инеләр. Улар бер-береһенең ауыҙына ғына ҡарап тора, бер-береһен ярты һүҙҙән аңлайҙар ине. Үлем түшәгендә ятҡанда 89 йәшлек бабайым ҡарсығына әйтә ҡуйған:

— Айырылабыҙ, тип артыҡ ҡайғырма. Бик һағынып китһәм, үҙенде ҡайтып та алырмын әле.

Ниндәй әсе шаярыу. Был һүҙҙәрҙе үрһәләнеп ысҡындырғандыр. Бабайымдың тел төбөндә ниндәй оло мөхәббәт, яҡты донъяға ҙур һөйөү ята. Уларҙан ете бала ҡалды. Хәҙер бөтәһе лә башлы-күҙле, етеһе лә емертеп донъя көтә.

Әсәйем, Ғилминиса абейемдең яҡты һындары алдында, Йәүһәрә һеңлем кеүек күп балалы меңәрләгән әсәләр ҡаршыһында салланған башымды эйәм.

Был юлы Шакира апайыма ла һуғылып киттем. Өйөнән ейәндәре өҙөлмәй, хатта тыуасарҙарын да ҡарай икән.

Ил инәһе үҙ йортонда үҙ йүнен үҙе күрә. Ейән-ейәнсәрҙәренә күҙ-колаҡ. Тик уларҙы яҡшылыҡҡа, яҡтылыҡҡа саҡыра, һикһән тигән һыртты ла артылған. Улы ла уны яңғыҙ ҡалдырмай, гел ҡул араһына инә. Юристың ярты көнө әсәһе янында үтә. Рәхмәт уға. Әсә күңелен һаҡлап йәшәй.

Ил тотҡаһы, ил намыҫы булған башҡорт Әсәләре. Милләтебеҙҙең яҙмышын уйлаһағыҙ ине. Күберәк бала таТ>ып, бала баҡһағыҙ, Халыҡ тигән күсебеҙ үрсер ине.

«Өй тултырып бала ҡарарға, тормошобоҙ ауыр бит, ул етмәй, был етмәй», — тиеүселәр ҙә табыла. Ә халыҡтың тормошо ҡасан еңел булғаны бар. Етмеш йыл, бәхет килер тип, алданып, моронобоҙ боҙға терәлеп ҡалды түгелме? Ҡатындар ирҙәр менән тиң хоҡуҡлы тип, күкрәк һуҡтыҡ.Ул тигеҙлек әсәләрҙең аҡтыҡ көсөн һығып алырға ғына ярҙам итте. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡатындарға сабыйҙарын тәрбиәләргә лә ваҡыты наҡыҫ ҡалды. Балалар баҡсаһында ла сабыйҙар инкубатор себештәрен хәтерләтә.

Ә шулай ҙа ишле ғаиләлә кескәйҙәр бер-береһенә арҡаланып түгел, бер-береһенә арҡа терәп үҫә. Бөгөнгөләй иҫемдә, бер саҡ Йәүһәрә һеңлем ҡулына бер табаҡ тотҡан да сиратлап балаларына бутҡа ҡаптыра, ә тегеләре, турғай балаларындай, ауыҙҙарын асҡандар ҙа, үргә ҡарап ризыҡ көтәләр.

— Рәхмәт төшкәрҙәре, өйрәнеп бөткәндәр, бер бешергән аш бөтәһенә лә етә, хәҙерҙән ғәҙеллекте аңлап үҫәләр, бөтәһе лә тигеҙ ҡарағанды төшөнәләр, — тип әсә рәхәтләнеп көлә. Күрәһең, бер ҡашыҡтан ейгәндәр татыу ҙа, иманлы ла була. Улар өсөн сит бауыр юҡ. Үҙ-үҙен иркәләмәҫ, мин-мин тип танауын күккә сөймәҫ, кеше ҡәҙерен белер.

Әсәне юғалтҡас ҡына уның ҡәҙерен беләһең икән. Һөйәп ултыртып ҡуйырҙай булаһың да, һуң инде хәҙер...

*Изгелегем тейер тигән саҡта*
*Был донъянан киткән әсәйем...*

Кешеләр бер-береһенә хәйерле тән теләйҙәр, һүҙ ҙә юҡ — изге юрау... Тик ниңә: «Әсәйең төшөнә керһен», — **тимәйҙәр икән? Бер йыр бар:**

*Мин бит һине ҡайҙа күрәм,*
*Төштәремдә күрмәһәм...*

Йыш ҡына төңгә ингәнемдә, әсәйем төшөмә керһен, тип юрайым. Яныма ниңә килеп, төшөмдә булһа ла башымдан һыйпамай икән? Өмөтөм аҡланмаһас, үрһәләнеп өнөмә ҡайтам...

Ҡыр... Әсәй... Ҡояш... һуғыш йылдарындағы ҡатындарҙың сыҙамлығына иҫебеҙ китә. Хатта ҡыш көндәре, бауырҙары менән көрт ярып, башаҡта ултырып ҡалған иген уралар ине бит. Хас тибендәге аттар тиерһең. Күҙенде ҡарышҡа терәп талпын әле.

Беҙҙең әсәләр ауырлыҡтарға, ҡайғыларға баш эймәне, күңел юғарылығын һаҡланы. Уларҙа иман ине... Әҙәмдәрҙең теле-тешенә инмәгәндәр. Сабый саҡта: «Диңгеҙ тубыҡтан», — тип, донъяға һыймай йөрөгән ҡатындарҙы күрмәнек. Ауыҙҙарына ни тура килһә шуны һөйләмәнеләр, әҙәпле инеләр. Әле урамда аңҡы-тиңке атлаған ҡатындарҙы күрһәк, иман ҡалмағанмы, тибеҙ. Әсә иҫерһә — донъя түңкәрелә кеүек. Ҡатын тулаһа, сығынсылаған атың ары торһон. Холоҡ тәртәһен емермәй ҡуймай. Шул эскелек арҡаһында күпме фажиғә тыуа, ғаиләләр тарҡала, бала күңеле кителә. «Атаһы юҡ ул — ҡуштан, инәһе юҡ — инмәй тыштан», ти халыҡ.

Юҡ, беҙҙең әсәйҙәр саф, аҡыллы ине. Оло ғәләмгә сыҡтыҡ, ваҡытында тыштан өйгә индек. Әсәйҙең күңел йылыһын тойҙоҡ.

*Ялҡын микән, һалҡын микән*
*Был донъяның ҡосағы.*
*Өшөйөм мин — һүнгән икән*
*Әсәйемдең усағы.*

Әсә усағы... Юҡ минең өсөн уның ҡуҙы һүнмәгән, уға һаман да ике ҡулымды һонам. Уларҙың усағы ла йылы. Икенсе ҡояшым һүнгәс, донъя ла һалҡын, йыһанда билем дә һыйыҡ, өйрәм дә шыйыҡ. Киткәндәрҙең нурлы һыны күҙ алдымдан китмәй. Әсәйҙәрҙең яҡты рухына шәүлә төшөрмәһәк ине.

Ҡояштың да, бәлки, табы барҙыр, нуры бигерәк яҡты шул, бер ҙә күрһәтмәй.

*Ямғырҙа ла, аяҙҙа ла.*
*Алсаҡ тыуған яҡтарым.*
*Күпме баҡһам да күрмәнем*
*Ҡояшымдың таптарын.*
*Яҡынла һин ут шарына,*
*Бейек ҡаяға олғаш.*
*Тел тейҙермәгеҙ ҡояшҡа,*
*Барыбер ҡояш, ҡояш...*

Ырыҫ йомғағына ҡарап, үтер юлыбыҙҙы билдәләйбеҙ. Гел уға һыйынабыҙ.

Күҙ алдына тыуған ҡырҙар йәйелеп китә. Баҫыу алдында кесерәйеп ҡалабыҙ. Уның киңлеге күңелдәребеҙгә күсһә ине, киләһе йылда иген уңһын ине. Күҙебеҙ асылып ҡалмаҫмы икән?

Әсәй... Ҡыр... Ҡояш...Әҙәм балаһы шул бөйөк өс затҡа таянып йәшәй икән — кеше тигән оло исемде йөрөтөргә лә хаҡы бар.

Әсәй... Ҡыр... Ҡояш...